# Туймазы педагогия колледжында ойошторолған “Аkтамыр” студенттар фәнни йәмғиәте

*Етәксеһе: Кәримова Г.Я., Туймазы педагогия колледжының башkорт теле һәм әҙәбиәте уkытыусыһы*

Бөгөнгө заман, йәмғиәтебеҙ юғары белемгә эйә булған ижади шәхестәргә мохтаж. Яңылыkтарға ынтылыусы, маkсаттарына ирешеүсе, илем, халkым тип янып йәшәүсе йәштәребеҙҙең күберәк булыуын бөтәбеҙ ҙә теләйҙер. Бының өсөн төрлө kыҙыkлы юлдар эҙләйбеҙ, яңы технологиялар kулланабыҙ, саралар ойошторабыҙ. Әйткәндәй, бөгөнгө Республика кимәлендә уҙғарылған фестиваль дә быға асыk миҫал булып тора.

Фән тауҙарынә үрләргә теләгән һәм телебеҙ киләсәгенә битараф булмаған йәштәрҙе үҫтереү маkсаты менән беҙ ҙә 2007 йылда Туймазы педагогия колледжында “Аkтамыр” исемле СФЙ ойошторҙоk.

Йәмғиәттең бурыстары:

- студенттарҙы тикшеренеү эшенә йәлеп итеү, уның методикаһы менән таныштырыу, ғилми һәм методик хеҙмәттәр менән эшләү барышында фәнни культура тәрбиәләү,
- уларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү, танып белеү эшмәкәрлеген активлаштырыу,
- башkорт телен пропагандалау, туған телебеҙгә, әҙәбиәткә kарата һөйөү , ихтирам тойғоһо тәрбиәләү,
- тел һәм әҙәбиәткә, методикаға бәйле тикшеренеүҙәр үткәреү аша уларҙа үҙ һөнәренә kарата ижади kараш булдырыу
- йәштәрҙә юғары әхләkи һәм мораль – этик сифаттар тәрбиәләү.

Студенттарҙың фәнни йәмғиәтенә башkорт теле һәм әҙәбиәте буйынса тикшеренеү һәм ижади эштәр менән шөғөлләнергә теләгән колледж студенттары йыйыла. Уkыу башында улар ойошмаға kабул ителә, рәйес һайлана, йыл буйына эшләр өсөн темалар билдәләнә, график төҙөлә. Шул уk ваkытта ойошма һәр йыл һайын билдәле бер тема буйынса

эшләй. Беҙ “Башkорт теле дәрестәрендә уйын технологияларын kулланыу”, “Башkорт теле һәм әҙәбиәт дәрестәрендә проект методы”, “Дәрестәрҙә заманса технологиялар kулланыу”, “Мәғлүмәти технологиялар” тип аталған темаларҙы өйрәндек. Йыл аҙағында студенттарҙың эшенә йомғаk яһала, конференциялар ойоштороvarious, йыйынтыkтар әҙерләнә.

Студенттар kала һәм район кимәлендәге сараларҙа ла әүҙем kатнаша. Былтыр, Республикабыҙҙа Милләт-ара татыулыkты нығытыу йылында, районыбыҙҙа Башkорт мәҙәниәте көндәре уҙғарылды. Беҙ ҙә ситтә kалманыk: “Туймазы ере –илһөйәрҙәр һәм эшһөйәрҙәр иле” исемле kала фәнни-ғәмәли конфереция һын үткәрҙек. Шул уk көндәрҙә Т.Ғарипова kатнашлығында “Бөйрәкәй” романы буйынса район китап уkыусылар конференцияһы уҙғарылды, унда студенттар яҙыусы ижады хаkында докладтар менән сығыш яһаны.

Беҙҙеңсә, яҙыусылар менән осрашыуҙар - йәштәр күңелендә оҙаk һаkланыр мәлдәр. Шуға күрә беҙ районды ң “ Алтын башаk” тип аталған яҙыусылар ойошмаһы ағзаларын, Өфө kалаһынан килгән билдәле әҙиптәрҙе көтөп алабыҙ.

Йәштәр араһында әҙәбиәт һөйөүселәр байтаk. Улар менән берлектә М.Кәрим, С.Юлаев, Р.Ғарипов кеүек башkорт яҙыусыларына арналған төрлө бәйгеләр, кисәләр, әҙәби-музыкаль композициялар үткәреү һәйбәт традицияға әүерелде.

Әлбиттә, былдай kыҙыkлы студент тормошо хаkында башkаларға һөйләге, шатлыkтарҙы бүлешке килә. Ошо теләк “Беҙҙең студент йылдары” исемле гәзит сығарыуға этәрҙе. Гәзиттә студент тормошона бәйле төрлө kыҙыkлы яңылыkтар урын ала. Публицистика өлкәһендә оҫталыkты арттырыр өсөн, беҙ “ Туймазы хәбәрҙәре” район гәзите хеҙмәткәрҙәренә кәңәш һорап мөрәжәғәт итәбеҙ. Мәҫәлән, яңыраk гәзиттең баш мөхәррир урынбаҫары Фәзуллина Г.Й. баҫманың сифатын яkшыртыуға бәйле йәштәргә төрлө тәkдимдәр еткерҙе.

Күреүебеҙсә, йәмғиәт ағзалары kыҙыkлы ижади проекттарҙы тормошkа ашыра. Был проекттарҙы улар үҙ аллы һәм төркөмләп башkаралар. Мәҫәлән, “М.Аkмулла” исемле

мультимедиялы әсбәп төҙөүҙә 6 кеше ҡатнашты. Бер студент Аҡмулланың ижады үҙенсәлектәрен өйрәнде, икенсе студент - биографияһын, кемдер бөгөнгө көндә шәхестең онотолмауы, әҙәбиәттә, сәнғәттә уның исеме һаҡланыуы хаҡында мәғлүмәт йыйҙы. Компьютер технологияларын яҡшы белеүсе мультимедиялы әсбәп әҙерләне. Хеҙмәттә башҡорт әҙәбиәте уҡытыусыларына ярҙам итерҙәй дәрес өлгөләре, мәҡәләләр, әҙәбиәт исемлеге һәм тағын да ҡыҙыҡлы материалдар тәҡдим ителде.

Республика кимәлендәге саралар ҙан да ситтә ҡалмаҫҡа тырышабыҙ. Сөнки унда йәштәргә үҫер өсөн офоҡтар киңәйә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса уҙғарылған олимпиадаларҙа, төрлө ижади бәйгеләрҙә, конференцияларҙа үҙ көсөбөҙҙө һынап ҡарайбыҙ. Уңыштарыбыҙ ҙа бар. Бына, мәҫәлән, “Йәшлек .Фән.Мәҙәниәт.” исемле Рәсәй асыҡ конференцияһында ҡыҙҙарыбыҙ ҡатнашты һәм 2-се урынды яуланы.

Йомғаҡлап әйткәндә, СФЙ эше йәштәрҙең тормошон йәнләндерә, предмет буйынса белемдәрен тәрәнәйтә, ижади һәләттәрен үҫтерә, ҡала һәм колледж мөхитендә башҡорт телендә аралашырға мөмкинлек тыуҙыра.